# Урал

Белорет районы һәм ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите

www.ural-rb.ru

Гәзит 1922 йылдан сыға

8 июль 2014 йыл

№ 79 (10871)


# "Башҡараһы эштәр күп"

## *Рөстәм Хәмитов көнүҙәк һорауҙарға яуап бирә*

**- Хөрмәтле Рөстәм Зәки улы! Белорет ҡалаһында ике яңы биҫтә - Мата аръяғы-2, Выселки-2 төҙөлә. Бында ер участкалары һатыла, күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ер бирелә. Инженер селтәрҙәрен үткәреү һуңлауына бәйле биҫтәләр төҙөлөшө тотҡарлана. Был проблема нисек хәл ителер?**

- 2014 йылда Республиканың адреслы инвестицион программаһына дөйөм финанслау күләме 6,6 млн. һум тәшкил иткән Мата аръяғы-2 биҫтәһен газификациялау һәм электр менән тәьмин итеү индерелгән. Проект документацияһын эшләгәндән һуң программаға «Выселки» биҫтәһендә инженер селтәрҙәрен үткәреү ҙә ҡаралған.

**- Белорет районында дөйөм оҙонлоғо 400 километрға яҡын булған хужаһыҙ электр селтәрҙәре иҫәпләнә. Ошоға бәйле район халҡын һәм социаль объекттарҙы электр энергияһы менән тотҡарлыҡһыҙ тәьмин итеү мәсьәләһе киҫкен тора. Был мәсьәләне хәл итеү йәһәтенән нимә эшләнә?**

- Мәсьәләне хәл итер өсөн электр селтәрҙәрен реконструкциялау һәм уларҙы хеҙмәтләндереүҙе махсуслаштырылған ойошмаға күсереү буйынса ҙур эш башҡарырға кәрәк. Район территорияһында был эште, инвестицион программаға ярашлы, «Башкирэнерго» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт ойоштора. Һуңғы өс йыл эсендә Белорет районында 167 километрҙан ашыу электр селтәрҙәре реконструкцияланды һәм төҙөлдө.

**- Республикала спорт объекттарын төҙөүгә ҙур иғтибар бүленә. Белорет ҡалаһында «Морат» тау саңғыһы үҙәген реконструкциялау иң өмөтләләрҙән һанала. Һуңғы ике йылда үҙәк икенсе һулыш алды, быйыл тау саңғыһын яратҡандарҙың күпләп килеүе күҙәтелде. Тау саңғыһы үҙәген үҫтереү йәһәтенән киләсәктә лә ярҙам булырмы?**



- Быйыл «Морат» тау саңғыһы үҙәге базаһында бөтә Рәсәй кимәлендәге бер нисә ярыш үткәрелде, элек улар илдең башҡа төбәктәрендә ойошторола торғайны. Реконструкцияға ярашлы, эшләп килгән 4 трасса киңәйтелде һәм көньяҡ битләүҙә яңыһы төҙөлдө, ҡар менән ҡаплатыу, яҡтыртыу системалары һалынды, кресло менән күтәргес сафҡа индерелде, тейешле инженер инфраструктураһы булдырылды. Үҙәкте модернизациялауға республика бюджетынан 300 млн. һумдан ашыу аҡса бүленде.

Әлеге ваҡытта ял итеүселәрҙе ҡабул итеү өсөн тейешле инфраструктура төҙөргә кәрәк. Мәсьәләне хәл итеү йәһәтенән инвесторҙар эҙләйбеҙ.

**- Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт.**

**Үҙ хәбәрсебеҙ.**

РӘСМИ БҮЛЕК

### ХӨРМӘТЛЕ БЕЛОРЕТТАР, ОЙОШМА ҺӘМ ПРЕДПРИЯТИЕ ЕТӘКСЕЛӘРЕ!

Башҡортостан Республикаһы Белорет ҡала-районының Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәге “Мәктәпкә әҙерләнергә ярҙам ит!” республика хәйриә акцияһы үткәрә.

Бөтә гуманитар ярҙам Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәгендә иҫәптә торған аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә, Ҡырым республикаһының Белогорск районындағы, көньяҡ-көнсығыш Украинанан килгән ғаиләләрҙең балаларына ебәрелә. Уларға уҡыу кәрәк-ярағы: портфель, китап-дәфтәр, мәктәп һәм спорт формаһы, аяҡ кейеме һәм башҡалары кәрәк.

Һеҙҙе Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәгендә (Белорет ҡалаһы, К.Маркс урамы, 46) 2014 йылдың 1 июленән 31 августына ҡәҙәр дүшәмбенән йомаға тиклем иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 9-ға тиклем көтәбеҙ.

**Белешмәләр өсөн телефон: 3-33-57.**

### ХӨРМӘТЛЕ БЕЛОРЕТТАР!

Украинаның көньяҡ-көнсығышында ҡатмарлы хәл килеп тыуыуға һәм Башҡортостан Республикаһы территорияһына, шул иҫәптән Белорет районына ҡасаҡтарҙың килә башлауына бәйле, Белорет районының социаль үҫешен яҡлау Хәйриә Фонды граждандарҙы һәм ойошмаларҙы зыян күргәндәргә үҙ ирке менән ярҙам итергә саҡыра. Аҡсаны түбәндәге реквизиттар буйынса ебәрергә мөмкин:

**Получатель: Благотворительный Фонд поддержки социального развития Белорецкого района Республики Башкортостан**

**ИНН/КПП 0256995235/025601001**

**р/с 40703810200190000025**

**к/с 30101810600000000770**

**Филиал ОАО “УРАЛСИБ” в г. Уфа**

**БИК 048073770**

**Назначение платежа: добровольное пожертвование для оказания помощи беженцам из юго-восточных областей Украины.**

Кешеләрҙән гуманитар ярҙамды Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәгендә (К. Маркс урамы, 46) ҡабул итәләр.

Һорауҙар, тәҡдимдәр менән 4-19-69, 01 телефондары буйынса Берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенә тәүлек әйләнәһенә мөрәжәғәт итергә була.

# Эскесегә иман да, оят та юҡ

*Һуңғы йылдарҙа халыҡтың сәләмәт йәшәү рәүешенә, айыҡ тормошҡа нығыраҡ ылығa барыуы, был йәһәттән ҙур эштәр башҡарыуы ҡыуандыра. Изге эшкә етәкселек, ауыл хакимиәттәре генә түгел, матур тормошҡа битараф булмағандарҙың барыһы ла тиерлек үҙ өлөшөн индерергә тырыша.*

Ошо урында республикала “Айыҡ ауыл” акцияһын башлап ебәргән йәмәғәт хәрәкәтенең тырышлығын баһалап китмәйенсә булмай. Йәштәр инициативаһы менән башланып киткән акцияла беҙҙең районның Абҙаҡ, Рысыҡай ауылдары ҡатнашты һәм матур һөҙөмтәләргә иреште. Быйыл бындай теләкте Инйәр ауыл хакимиәтенә ҡараған Бирҙеғол халҡы белдерҙе. Әл-биттә, ниндәйҙер яңы эшкә тотонғанда төрлө кәртәләргә, ауырлыҡтарға осрарға, ике яҡлы фекерҙәр ишетергә лә тура килә. “Айыҡ ауыл” акцияһын да халыҡ төрлөсә ҡабул итте. Берәүҙәре мыйыҡ аҫтынан шикле генә көлөп ҡуйһа, икенселәре, юҡ менән булышалар тип, башҡаларҙы ла шуға ышандырырға тырышты. Ә бына өсөнсөләре, бер нәмәгә лә ҡарап тормай, ең һыҙғанып, эшкә тотондо. Һуңғыларының әүҙемлеге менән сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, халыҡты ошо тормошҡа ылыҡтырыу буйынса күп кенә ыңғай эштәр башҡарылды, тиһәк, һис хата булмаҫ. Акцияла ҡатнашҡан ауылдарҙағы ҡайһы бер аныҡ күренештәрҙе быға миҫал итеп килтерергә булыр ине. Мәҫәлән, айыҡ туйҙар үткәреү, ошо өлгөгә эйәреүселәр күбәйҙе, үлемгә ҡарағанда тыуым артты, өйҙән йәшереп спиртлы эсемлек һатҡандарға контроль көсәйҙе, хужалары менән килешеп, магазин кәштәләренән араҡы, һыра һатыу тыйылды, ауыр тормош хәленә ҡалған ғаиләләр менән аңлатыу эштәре алып барылды һәм башҡалар. Тик шуныһы ҡыҙғаныс, ҡайһы берәүҙәр проектҡа ҡушылыу менән, бөтә эскән кешеләрҙе бер юлы айындырып бөтөргә тейештәр тип уйлай. Был һүҙҙәрҙе акцияның төп маҡсатын аңламағандар ғына әйтәлер, тип уйлаһаҡ, дөрөҫөрәк булыр. Ысынында иһә, проект хәмерле һәм айыҡ тормоштоң айырмаһын тойорға, “йәшел йылан” ағыуының ни тиклем мәкерле, яһил булыуын тағы бер ҡат иҫебеҙгә төшөрөргә, уның эҙемтәләрен аңлатырға тырыша.

**(Аҙағы 2-се биттә).**




# Сәйәхәтселәр - Иҙел башында

*Рус география йәмғиәте ағзалары, Пенза ҡалаһынан активистар, Рәсәй тарихын һәм мәҙәниәтен һаҡлау, популярлаштырыу, боронғо цивилизацияға бәйле иҫтәлекле урындар менән яҡындан танышыу маҡсатында, инде икенсе йыл "Боронғо цивилизациялар юлы буйлап" төбәк-ара автоуҙыш ойоштора.*

Быйыл Андрей Сальников етәксселегендәге өс ғаилә ун көндән ашыу Башҡортостан менән танышты. Улар сәйәхәтен Мәләүез ҡалаһынан башлаһа, унан һуң Йомағужа һыу һаҡлағысында, Шүлгәнташ мәмерйәһендә, Темәстә, Талҡаҫ күлендә, Сибай руднигында, Арҡайымда, Магнитогорск ҡалаһында булды.

Белорет ере лә уларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Тәүҙә ҡала тарихи-крайҙы өйрәнеү музейында булдылар. Унда сәйәхәтселәр менән муниципаль район хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Илгиз Теләүбаев осрашты, ҡунаҡтарға "Белорет энциклопедияһы", "Белорет мөғжизәһе" китаптарын бүләк итте.

- Башҡортостанда беҙҙе аңлап ҡаршы алалар, халыҡ алсаҡ һәм аралашыусан. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе ҡараныҡ. Ғалимдар белдереүенсә, һүрәттәрҙе 14 мең йыл элек төшөргәндәр. Арҡайымда беҙҙең эраға тиклем 3 мең йыл элек йәшәгәндәр. Белорет ҡалаһына 250 йыл элек нигеҙ һалынған. Ике төрлө тарихи дәүер, шулай булһа ла, беҙ уларҙы урындағы металлургия үҙәктәре тип ҡарайбыҙ. Беҙҙең маҡсат - мәҙәни мираҫ һәм крайҙың боронғо цивилизацияһы буйынса видеоматериал йыйыу. Әгәр килеп сыҡһа, бер йылдан һуң тағы ла һеҙҙең яҡтарға килеү ниәте бар. Ҡайтҡас, йыйылған видеоматериалды системаға һалып, монтажлап, телевидение аша һеҙҙең төбәк тураһында Пенза крайы халҡына күрһәтеү. Шулай уҡ видеотчетты Рус география йәмғиәтенә ебәрәбеҙ. Бында матур урындар күп икәнен һирәктәр генә белә. Һеҙҙең тәбиғәтегеҙ бик матур, - тине Андрей Сальников журналистар менән осрашҡан саҡта.

Пенза сәйәхәтселәре ҡаланың тарихи урындарында, Тирлән, Шушпа, Арский ташы ауылдарында булды. Артабан Елмерҙәк һырттары аша үтеп, Ғафури районы, Стәрлетамаҡ шихандары менән танышты.

**Р. МУСИНА.**
**Автор фотоһы.**

---

♦ *ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ*

# «Күләгәле утрау»

**Яҡташыбыҙ Раят Вәлиевтең Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә күптән түгел донъя күргән «Күләгәле утрау» тип аталған китабы мажаралы повестан тора.**

Раят Барый улы районыбыҙҙың тауҙар төпкөлөн төйәкләгән Баҡый ауылында әҙәбиәт яратҡан, йыр-моңға әүәҫ урмансы ғаиләһендә тыуып үҫкән. Белорет педучилищеһын тамамлай, армияла хеҙмәт итә. Оҙаҡ йылдар Белорет районы эске эштәр бүлегендә паспорт өҫтәле начальнигы, Межгорьела тәүтикшереүсе булып эшләй. Отставкалағы милиция майоры, наградалары бар. Йәштән үк проза әҫәрҙәре ижад итә. Был - авторҙың тәүге китабы. Ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә Башҡортостанда бара. Хәҙерге көнитмешебеҙ хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған детектив әҫәр әҙәбиәт һөйөүселәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип ышанам.

Раятты ҡотлайыҡ, ижади уңыштар теләйек.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

---

# Эскесегә иман да, оят та юҡ

**(Башы 1-се биттә).**

Проектҡа ҡушылған Бирҙеғол ауылы халҡына ла әллә күпме ауырлыҡтар менән осрашырға, бик күп кешеләр менән аралашырға тура киләсәк. Ауылының киләсәге өсөн битараф булмағандар был йәһәттән ең һыҙғанып эшкә тотонған да инде. Бөгөн бирҙеғолдарҙы ситтән күсеп килеүселәрҙең бәйһеҙ тормош алып барыуы, йорттарында эскелек ойоштороуы, сит ғаилә тормошон боҙоуы борсолоу тыуҙыра. "Ситтән күсеп килеп, аҙғын тормош алып барғандарҙы ауылдан ҡыуырға ине. Улар яйы сыҡҡанда эскенән баш тарта алмаған ауылдаштарыбыҙҙы эскелек һаҙлығына батырып ҡына ҡалмай, йәш быуынға ла алама үрнәк күрһәтә. Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында эшләп йөрөгән, эске менән мауыҡҡан ҡайһы бер ирегеттәребеҙгә лә ныҡлы тыйыу кәрәк. Нәҡ шундайҙар арҡаһында "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуыбыҙ бәҫен юғалтасаҡ, шул етешһеҙлектәрҙе бөтөрмәйенсә алға ынтылыуыбыҙ башҡаларҙа көлкө тыуҙырасаҡ", - тип үртәнде ошо ауылда ғүмер иткән апай. Апайҙың борсолоуҙарын Инйәр ауыл хакимиәте башлығы Ғайса Ғәбделхаҡ улы Мөфтәхетдиновҡа еткерҙек.

- Үкенескә ҡаршы, эскеселәргә, амораль тормош алып барыусыларға нәфрәтебеҙ ни тиклем генә көслө булмаһын, был өлкәлә лә бик һаҡ эш итергә тура килә. Һәр кем үҙе теләгән ерҙә йәшәргә, балалар үҫтерергә хоҡуҡлы. Шуға күрә бер кемде лә анһат ҡына ауылдан ҡыуып та, йә иһә балаларын тартып алып та булмай. Шулай уҡ эсеп аҡылын юғалтҡандарҙы ла, хәмер ҡоллоғона бирелеп, яҡындарын йәберләүселәрҙе лә үҙ иркенән тыш дауаланырға ебәреп булмай. Был осраҡта закон бөтә нескәлектәрҙе лә иҫәпкә алырға, кешенең конституцион хоҡуғын һаҡларға ҡуша. Шулай ҙа ҡул ҡаушырып ултырмайбыҙ, эсергә яратыусылар менән профилактик саралар үткәрелә, уларҙың һәр аҙымы тиерлек контролдә тотола. "Айыҡ ауыл" акцияһына ҡушылыуҙы ла дөрөҫ аңларға кәрәк. Ул оҙаҡ йылдар эскән кешеләрҙе бер көн эсендә генә айындырып, һатыуҙағы бөтә спиртлы эсемлектәрҙе алып бөтөүҙе аңлатмай. Тәү сиратта, айыҡ тормош өсөн тырышҡандарҙың инициативаһын етәкселек кенә түгел, бөтәбеҙ бергәләп күтәреп алырға, ошо йүнәлештә ярҙам итергә тейешбеҙ. Сәләмәт тормошто популярлаштырыу, йәшендә лә, олоһонда ла ошо тормошҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатынан төрлө профилактик һәм мәҙәни, спорт саралары ойошторолорға тейеш. Ниндәйҙер һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн был башланғысты акция тамамланғас та дауам итергә, тырышып эшләргә һәм етешһеҙлектәр менән көрәшергә тура киләсәк.

Бирҙеғолдар быйыл үҙ теләге менән "Айыҡ ауыл" акцияһына ҡушылды. Халыҡта сәләмәт йәшәүгә теләк, ынтылыш булыуы ҡыуандыра. Шуға күрә урындағы хакимиәт тә уларҙың инициативаһын хуплап, күтәреп алды. Теләк булғас, күмәк көс менән ниәтебеҙгә ирешербеҙ, тип ышанам. Әлегә етешһеҙлектәр булһа ла, уларҙы бөтөрөү буйынса ныҡлы эш башланған. Ауылда ҡатын-ҡыҙҙар советы, Ағинәйҙәр ҡоро булдырылды. Яҙын уҙғарылған йыйылыш барышында башҡарыласаҡ эш планы төҙөлдө. Шул ваҡытта планға индерелгән ҙур эштәрҙең береһе - ауыл зыяратын төҙөкләндереү күмәк көс менән тормошҡа ашырылды ла инде. Ауыл халҡының ҡабул иткән пландарын, ҡарарҙарын тормошҡа ашырырға Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы ҙур ярҙам күрһәтә. Ул биләмә территорияһында халыҡты эш менән тәьмин иткән берҙән-бер етди предприятие. Уның етәксеһе Фәнүр Хажиғәли улы Әлибаев хеҙмәткәрҙәренең эшенә генә түгел, шәхси тормошона ла талапсан ҡараштa. Эсергә яратҡан хеҙмәткәрҙәр менән ныҡлы аңлатыу эштәре алып бара, уларҙың ғаилә тормошон да күҙ уңынан ысҡындырмай. Дөйөм алғанда, Бирҙеғол халҡы дәртле, тырыш. Сәләмәт йәшәү рәүешен һайлап, сәләмәт быуын үҫтерергә ниәтләнгәнбеҙ икән, һис шикһеҙ, быға ирешербеҙ тип ышанам, - тине Ғайса Ғәбделхаҡ улы.

Һуңғы йылдарҙа айыҡ тормошто пропагандалау һөҙөмтәләрен, яңы проекттың яйлап ҡына булһа ла үҙ эшен эшләүен күрмәү мөмкин түгел. Мәҫәлән, бынан бер нисә йыл элек спиртлы эсемлектәрһеҙ туй үткәреүҙе күҙ алдына ла килтерә алмаһаҡ, хәҙер күптәр быны ғәҙәти күренеш, хатта заман модаһы һымаҡ ҡабул итә һәм шуға ынтыла башланы. Нимә генә тиһәк тә, халҡыбыҙ заман сире менән көрәшергә, үҙен нисек булһа ла "йәшел йылан" ағыуынан һаҡларға тырыша. Яңыраҡ ҡына "Бәйләнештәр" селтәрендә Гүзәл Рамазан ҡыҙы Ситдиҡованың яҙмаларына тап булырға тура килгәйне. Ул республикабыҙҙағы бер район (райондың исемен сер итеп ҡалдыра) халҡының эскелек менән көрәшеүҙең яңы алымын уйлап табыуын һәм боронғо йоланы тергеҙеүен яҙғайны. Баҡһаң, өйөнән шайтан һыуы һатҡан "сауҙагәрҙәрҙе" нисек тыйырға, эскеселәрҙе нисек айындырырға белмәгән ауыл халҡы күмәкләшеп яланға сығып, мулла саҡырып, уларға ҡарата бәддоға уҡый икән. (Бәддоғаның насар теләк, ҡарғыш булыуын барыһы ла яҡшы аңлайҙыр). "Ошонан һуң ауылда эсеү бермә-бер кәмегән. Бына бит - милләт үҙ-үҙен һаҡлау юлын эҙләп таба!"- тип яҙа Гүзәл Рамазан ҡыҙы. Был яҙмаға ҡарата төрлө фекерҙәр әйтелгәйне. Кемдер ҡаршы төшкән, кемдер хуплаған. "Йола? Бәддоға уҡыу ҙа хәҙер йола булып киттеме инде. Бәддоға һәм ҡарғыштары үҙ баштарына төшөр тип уйламаймы һуң муллаларығыҙ?" - тип яҙа береһе.

Эскесегә иман да, оят та юҡ, тиҙәр. Шуға күрә, ҡарғыш менән булһа ла ҡурҡытып, милләттәшен шешә ҡоллоғонан тартып алырға тырышҡандыр ауылдаштары. Күрәһең, ниндәйҙер боронғо йолаларҙы иҫкә төшөрөү халыҡтың сараһыҙлыҡтың сигенән сығып эшләгән һуңғы әмәле булғандыр. Матур, айыҡ тормошта йәшәү өсөн мөмкинлектәр бар бөгөн. Тыныс таңдарыбыҙҙың, аяҙ күгебеҙҙең ҡәҙерен белеп, бер ниндәй бәддоға, ҡарғыштарһыҙ ғына йәшәй белһәк ине.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

8 июль – Бөтә Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө

*Мин был парҙы оҙаҡ йылдар беләм. Беләм генә түгел, ә уларҙың башҡаларға өлгө булырлыҡ итеп көн күреүенә, тырышып эшләүҙәренә, балаларына тейешле тәрбиә биреп, белем алырға ярҙам итеүенә, әүҙем тормош позицияһында тороуҙарына һоҡланам.*

# Ныҡлы ғаилә - ил күрке

Хужабикә Рәйлә Абдулла ҡыҙы күп балалы ғаиләлә тыуып үҫкән. Тормош иптәше Валерий Ғариф улы Садиҡов менән икеһе лә хеҙмәт юлын иртә башлай. Донъя йөгөн бергәләп тартҡанда ғына матур йәшәргә була бит ул. Садиҡовтарҙың татыу ғаиләһе лә шундайҙар рәтендә. Шуға күрә уларҙың ғаилә нигеҙен тормоштоң ямғыр-бурандары ла, көслө елдәре лә һындыра алмай.

Валерий һәм Рәйлә Садиҡовтарҙың ғаилә ҡороуына ла 33 йыл булып киткән. Рәйлә Абдулла ҡыҙы металлургия техникумын тамамлағас, Белорет металлургия комбинатына эшкә урынлаша. Үҙен тик яҡшы яҡтан ғына күрһәткән хеҙмәткәрҙе эшендә тиҙ үрләтәләр. Хаҡлы ялға сыҡҡансы мастер вазифаһын башҡара. Әлбиттә, мастер булып эшләү өсөн һәләт тә, эшселәр күңеленә асҡыс таба белеү ҙә, уларҙы аңлау ҙа мөһим. Рәйлә Абдулла ҡыҙы был яҡтан һынатмай, хеҙмәткәрҙәре менән уртаҡ тел табып эшләй, кешелеклелеге булыуы арҡаһында хөрмәт, абруй яулай.

Валерий Садиҡ улы ла оҙаҡ йылдар комбинаттың прокат цехында эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. Ул 43 йыл стажға эйә булған металлург. Бөгөн Садиҡовтар икеһе лә маҡтаулы хеҙмәт ветерандары. Тырыш ғаилә ике ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергән. Балалары ла изге күңелле, олоно-оло, кесене кесе итә белә. Мәктәптә уҡ өлгәшле булған ҡыҙҙар, юғары белем алып, тормошта үҙ юлдарын табып йәшәй бөгөн.

Ял көндәрендә атай йорто балаларҙың, туғандарҙың шат тауышына тула. Рәйлә Абдулла ҡыҙының зауыҡлы итеп йыйыштырылған ҡотло йортонан йәм, дәрт алып таралыша улар. Уңған хужабикә бәйләм бәйләүгә, ашһыу әҙерләүгә лә оҫта, бүлмә тултырып гөлдәр ҙә үҫтерә. Йәй көнө иһә урман гизеп, бәшмәген, емеш-еләген йыя. Өй алдындағы баҡса ла иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә сәскәләргә күмелеп ултыра.

- Тормош иптәшем яҡшы ир генә түгел, абруйлы атай, ихтирамға лайыҡ олатай ҙа, - ти Рәйлә Абдулла ҡыҙы ғорурланып.

Рәйлә Садиҡованың бәхетле тормошона ҡарап, йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрәм. Изге онотолмай. Һәр ваҡытта ла кешегә яҡшылыҡ ҡылып йәшәгән мәрхүмдәрҙең урыны, моғайын да, ожмахталыр. Бар яҡтан да килгән атай-әсәй тәрбиәһендә үҫкән Рәйлә Садиҡова бөгөн үҙе маҡтаулы хеҙмәт юлы үтеп, тормош иптәше Валерий Ғариф улы



күңелле, алсаҡ Рәйлә мине йыш ҡунаҡҡа саҡыра торғайны. Ата-әсәһе - Мөнәүәрә апай менән Абдулла ағай ҙа бик яҡшы кеше булды. Уларҙың мине ҡурсалауы, ауыр мәлдәрҙә ярҙам итергә тырышыуы менән илебеҙгә лайыҡлы балалар тәрбиәләп үҫтереп, мохтаждарға ярҙам күрһәтеп, күптәргә өлгө булып гөрләтеп донъя көтә. Ошондай кешеләр күберәк булһын ине арабыҙҙа.

**Л. НУРМӨХӘМӘТОВА.**

♦ БАЙРАМДАР

*Шатлыҡлы ла, һағышлы ла мәлдәргә бай булды Ҡарағайҙа үткән байрам. Һағышлы, сөнки һине атай-әсәйең һәм туғандарың ҡаршы алмай, шатлыҡлы, сөнки йырак араларҙы алыҫ итеп үҙҙәре тәпәй баҫҡан ергә, ата-бабалар ҡәберенә баш эйергә ҡарты ла, йәше лә килгән. Эшҡыуар Рауил Ғәбдинур улы Вәлиевтең Ҡарағайға яңы һулыш өрөүе, юҡҡа сыҡҡан ауылды тергеҙеүе икеләтә ҡыуаныслы. Байрамдың бағыусыһы ла – ул!*

Ошо ауыл ҡыҙы, бөгөнгө көндә Егеҙе мәҙәниәт йортоноң художество етәксеһе Фәүзиә Салауат ҡыҙы Ғәлиуллина ойошторған байрам ысын һабантуйҙы хәтерләтте. Сәхнә матур итеп биҙәлгән, киң аҡланда төрлө уйындар һәм спорт ярыштарына урын бүленгән, ҡаҙандарҙа аш, былау бешә, самауырҙар ҡайнай. Зыярат таҙартылған, кәртәләнгән.



# Ҡайттыҡ һиңә, Ҡарағай, бер нигә лә ҡарамай

*Ҡарағай ауылында үткән «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамынан*



Иң тәүҙә Булат Абдрахман улы Сафуанов бөтәһен дә Рамазан айы, ураҙа башланыу менән ҡотлап, изге теләктәрен еткерҙе һәм мәрхүм, мәрхүмәләр рухына аят уҡыны. Һуңынан Ҡарағай халҡын, ҡунаҡтарҙы Егеҙе хакимиәте башлығы Рәил Ишмырҙа улы Ғәлиуллин байрам менән ҡотлап, зыяратты кәртәләүгә, тәртипкә килтереүҙә, ошо байрамды үткәреүҙә ярҙам иткәндәргә рәхмәт белдерҙе һәм Маҡтау ҡағыҙҙары, бүләктәр тапшырҙы. Шулай уҡ сәхнәгә бер-бер артлы Ҡарағайҙа йәшәгән Ғайсиндар, Әхмәровтар, Сафуановтар, Данъяновтар сыҡты. Улар ауыл һәм бында йәшәгән кешеләр тураһында хәтирәләре менән уртаҡлашты. Ғилфан Сафуанов хатта Ҡарағайҙың элекке планын төҙөгән, ауылдың килеп сығышы, урамдары һәм ғаиләләрен күрһәтеп һөйләне. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, рәхәтләнеп бейене.

Мәхмүҙә Вәлиулла ҡыҙы Әхмәрова ла йәшлеген иҫкә алғандан һуң сәхнә тултырып бейеп алды. Һәр сығыш яңғыраусынан һуң ошо матур байрамды алып барған Фәүзиә Ғәлиуллина менән Булат Сафуановтың, музыкаль яҡтан биҙәгән Егеҙе мәҙәниәт йорто директоры Илгиз Сәғәҙәтовтың, ҡыҙы Ләйсән менән Рита Фәйзуллинаның, Наташа Кидрачеваның йырҙары, дәртле бейеүҙәре барыһына ла оҡшаны.

Төрлө уйын һәм ярыштарҙа олоһо ла, кесеһе лә ихлас ҡатнашты. Көрәштә ағалы-ҡустылы Артур һәм Айрат Зариповтар еңеү яуланы. Рауил Вәлиев уларға бәрән һарыҡ тапшырҙы. Ә бына һырғауылдағы ҡиммәтле 3 бүләкте лә Ильяс Сәғәҙәтов алып төштө, сөнки унан да етеҙерәк, сосораҡ кеше табылманы. Шулай уҡ һыу ташып та ярыштылар, тоҡ кейеп тә йүгерҙеләр, күҙ бәйләп бүләктәр ҙә ҡырҡтылар. Ғөмүмән, бик күңелле һәм матур үтте байрам.

Мәүлиҙә Нәҙершина ҡыҙы Лилиә менән Рауил Вәлиевтең аятҡа тип биргән һарыҡ итенән тәмле аш һәм былау әҙерләгән. Мәүлиҙә ханымдың улдары ла ярҙамлашты. Сәй табыны артында ла күңелле аралашыуҙар, хәтирәләр менән уртаҡлашыуҙар дауам итте.

**З. ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВА.**

# Ҡотлайбыҙ!

[756.] **ӘХМӘТШИНА**
**Сәүиә Ханнан ҡыҙына**

Аҙналы

**Хөрмәтле тормош иптәшем, һөйөклө әсәй, ҡәҙерле ҡәйнә, яраткан өләсәй!** Һине 55 йәшлек юбилейың уңайынан ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм йөрәк түренән сыҡҡан матур теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Йөрәгендә йән тыныслығы, күңел көрлөгө юғалмаһын, яңынан-яңы шатлыҡ-ҡыуаныстар өҫтәлеп, һәр көнөң һөйөнөстәр менән тулып торһон, һаулығыңды ныҡлығын, бәхеттең нурлыһын, ғүмерҙең оҙонон, көндәрҙең сыуағын, шатлыҡтарҙың мөлдөрәмә тулыһын теләйбеҙ.

*Аҡ бәхеттәр менән атһын таңдарың,*
*Ҡояш көлһөн мәңге күгеңдә.*
*Теләктәрҙең ихлас, изгеләрен*
*Беҙ теләйбеҙ һиңә тыуған көнөңдә.*

**Ҡотлау менән - тормош иптәшең, улдарың Даян, Руслан, Азат, ҡыҙҙарың Дилара, Эльнара, Гөлнара, киленең Венера, кейәүҙәрең Руслан, Илгиз, ейәнең Ислам, ейәнсәрең Алһыу.**

[769.] **ГОРБАЧЕВА-АБДУЛЛИНА**
**Мәнзүрә Уйылдан ҡыҙына**

Белорет

**Ҡәҙерләләрҙән-ҡәҙерле әсәкәйебеҙ, өләсәй!** Һине оло юбилейың - 70 йәшең тулыу менән ҡайнар ҡотлап, ныҡлы һаулыҡ, сабырлыҡ, тыныс төндәр, аяҙ иртәләр, изгелектәр күреп, доғаларыңды уҡып, оҙон-оҙаҡ йәшәүеңде теләйбеҙ. Йәмле Берештамаҡ ауылында тыуғанғамы, әсәйебеҙҙең күңеле нескә, хискә бай, теле йомшаҡ, тауышы наҙлы! Берүк оҙаҡ йәшә, әсәй! Был матур донъяларҙы ташлап китә күрмә, моң-зарға тулы хистәреңде шиғыр юлдарына һалаһы, беҙҙең һөйөнөстәрҙе ишетеп, тыпырҙатып бейейһе көндәрең, йырланаһы матур йырҙарың күп бит әле һинең. Һинең әйткән доғаларың менән генә эштәребеҙ уң, шуға ла беҙҙең дә һиңә күрһәтәһе изгелектәребеҙ, әйтәһе наҙлы һүҙҙәребеҙ күп йылдарға һуҙылһын. Баҡсаң булғанда дәрт-дарманыңды, күңеленде, йәнеңде һалып үҫтергән сәскәләреңә, йәшелсәләреңә, емеш ҡыуаҡтарыңа ҡарап күңел ҡыуанды, һинең ҡулың тейгән бар ер көлөп торҙо. Тәҙрә төптәреңдә шау сәскәгә күмелеп ултырған гөлдәрең, әйтерһең дә, үҙеңдең йылы, ихлас, наҙлы күңел көҙгөң! Тырыш та, ныҡыш та, талапсан да үҙең! Шуға ла тормошоң муллыҡта, бәрәкәтлектә матур үтте. Беҙ һинең менән ғорурланабыҙ һәм һине бик ныҡ яратабыҙ! Ҡәҙерлебеҙ!

*Йөрәгең картаймаһын,*
*Һаман тынғы белмәй типһен,*
*Мәңге йәш булып ҡалһын.*
*Ғүмерҙәрең булһын бәхетле,*
*Бәхеттәрең булһын ғүмерле.*

**Иң изге теләктәр менән - ҡыҙҙарың, кейәүең, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

[770.] Берештамаҡта тыуып үҫкән, Белореттағы әшәгән ҡәҙерле туғаныбыҙ **ГОРБАЧЕВА-АБДУЛЛИНА Мәнзүрә Уйылдан ҡыҙына** - 70 йәш! Мәнзүрә апай! Оло-оло ғүмер байрамығыҙ менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Донъяның ҡәҙерен белеп, булғанына Аллаға шөкөр итеп, иманлы юлдан барған ҡәҙерлебеҙ кешеләрҙе рәнйетмәйенсә, юғалтыуҙар кисерһә лә, донъянан зарланмайынса, үҙендә йәшәүгә көс табып, ғазаптарын, ҡайғыларын, күңелендәге ҡәҙерле минуттарҙы, бәхетле сәғәттәрҙе дәфтәренә шиғыр юлдары итеп теҙеп, китап итеп сығарырға йыйына. Күҙҙәрендә нурҙар уйнап торған апайыбыҙ күркәм буйлы, ә йөҙөнөң мөләйемлеге, шуға ла бөтә туғандары ла уның өсөн өҙөләп тора, уны уратып алған дуҫтары, яҡындары ла үҙе кеүек ябай, ихлас. Ике ҡыҙ үҫтереүе менән дә бәхетле ул, ярата белеүе менән бәхетле!

Артабанғы ғүмер көҙөндә фани донъялыҡтың яҡшылыҡтарын күберәк күреп, сәләмәтлеккә туйынып, игелектәр менән оҙон-оҙаҡ йәшә, ҡәҙерлебеҙ. Беҙ һине яратабыҙ!

*Һин Хоҙайҙан низер һорап*
*Доға ҡылаһың.*
*Һөйләшәһең уның менән,*
*Ҡәнәш алаһың.*
*Ә Хоҙайҙың ҡәнәштәре*
*Һинең күңелдә.*
*Күңеленде тыңлап йәшә*
*Ғүмер-ғүмергә.*

**Иң изге теләктәрҙә бөтә туғандарың исеменән - Илдар, Розалия, Ильяс, Әлиә Абдуллиндар.**



[779] Йәйҙең матур айында тыуған - кәләшем **Альбина Ринат ҡыҙы** һәм һеңлем **Луиза Рәмил ҡыҙы Баймөхәмәтоваларҙы** тыуған көндәре менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Ҡәҙерлеләребеҙгә иҫәнлек-һаулыҡ, шатлыҡ, ғаилә бәхете, эштәрендә уңыштар теләйбеҙ. Тыуыр тандарығыҙ - яҡты, бәхет-шатлыҡтарығыҙ - мул, киләсәгегеҙ йыр кеүек матур, ҡояш кеүек яҡты булһын.

Шулай уҡ туғандарыбыҙ - **Руслан Рәмил улы Баймөхәмәтовты, Фидан Вәкил улы Шәрәфетдиновты, Гүзәл Хәким ҡыҙы Мортазинаны** ихлас күңелдән ғүмер байрамдары менән ҡотлайбыҙ!

*Бәхеткә, шатлыҡҡа күмелеп,*
*Һәр ваҡыт йылмайып һәм көлөп.*
*Ҡәҙергә, хөрмәткә төрөнөп,*
*Йәшәгеҙ мәңгелек нур булып.*

**Иң изге теләктәр менән - тормош иптәшең, ҡустығыҙ, ағайығыҙ Русим Рәмил улы, Алина, Аслан.**

# ҠЫЙҒАС ҠАШ - АЙ



*Эй, ҡыйғас ҡаш,*
*ҡыйғас ҡаш,*
*Ҡарап торам һиңә.*
*Ниндәй нескә булып*
*ҡалғанһың?*
*Алыҫтарҙан күреп*
*һине ҡояш*
*Сағыу нурҙар менән*
*баҙлатһын.*
*Һин яңынан, беләм,*
*тереләһең,*
*Хоҙай һине шулай*
*яралтҡан.*

*Шундай матур*
*булып бар ғәләмгә*
*Нурҙар һибәң ергә*
*йыраҡтан.*
*Балҡыһасы әҙәм*
*балалары*
*Һинең кеүек ҡабат-*
*ҡабаттан.*
*Һуңә улар мәңге*
*ҡайтмаҫҡа.*
*Ҡыйғас ҡашым, мин*
*көнләшәм һиңә,*
*Һин тыуаһың һәр*
*саҡ яңынан.*

**Мәнзүрә АБДУЛЛИНА-ГОРБАЧЕВА.**

## Хөрмәтле Мәнзүрә Уйылдан ҡыҙы!

Һеҙҙе 70 йәшлек матур юбилейығыҙ менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Һеҙ йәмле йәйҙең уртаһында тыуғанғамы, һәр саҡ был тормошто йәмләп, наҙға күмеп, беҙҙә йәшәйһегеҙ. Әйтерһең дә, күңелегеҙ тик изгелектән, яҡшылыҡтан, ғәмдән, моңдан яралған. Һеҙҙең шағирә булып китеүегеҙ ҙә тап ошонан киләлер. Киләсәктә лә иҫәнлектә-һаулыҡта илһамланып, матурлыҡ бөркөп, оҙон ғүмер кисерегеҙ.

*Тауҙай бәхеткә ирешеп* *Ижад бейеклектәренә*
*Төпкөлдәге тау ҡыҙы.* *Илһам атын гел ҡыуҙы.*
*Тыуған еренә һөйөүҙән* *Яҙмыш уны иркәләтеп,*
*Күңелендә йыр тыуҙы.* *Ағинәй итеп ҡуйҙы.*

**Изге теләктәр менән - «Урал» гәзите хеҙмәткәрҙәре.**

[778] Әбҙәк урта мәктәбе администрацияһы, уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективы, ветеран-уҡытыусы **ФӘИЗОВА Динә Ғәбит ҡыҙының** вафат булыуы сәбәпле, мәрхүмәнең яҡындарының, туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

[776.] **ПРОДАМ ВАЗ-21099** (2001 г/в, инжектор, серебристого цвета). **8-905-001-91-58.**

**Отсев. Бут. Щебень. Песок. Ассинский камень. Услуги КамАЗ самосвал, экскаватор, погрузчик.** [709.] **8-905-181-15-93.**

[772.] **ПРОДАМ контейнер** 2х2,5; 4х4; утепленный 2,5х6 в п. Инзер. **8-905-352-65-52.**

[775.] **ПРОДАМ** коз. **8-962-546-88-48.**

[768.] 1991 йылғы МТЗ-82 һатам. **8-906-372-14-95.**

[764.] 5 йәшлек өйөр айғыры **ҺАТАМ. 8-965-945-58-25.**

[767.] Т-40 тракторы һатам. **8-987-148-56-87.**

[763.] **ПРОДАМ** МТЗ-82. **8-967-742-65-33.**

## РӘХМӘТ ҺҮҘЕ

[774.] Шығай ауылында тыуып үҫеп, шунда ғүмер кисергән ҡәҙерле атайыбыҙ **МИНҺАЖЕВ Әйүп Шәйшәриф улы**, барыбыҙҙы ла ауыр ҡайғыға һалып, 1 июлдә мәңгелек донъяға күсте. Беҙҙең ҡайғыбыҙҙы уртаҡлашҡан, рухи һәм матди ярҙам күрһәткән бөтә ауылдаштарға, туғандарға, күршеләребеҙгә, Шығай ФАП-ы фельдшеры Филүзә Салауат ҡыҙы Миһрановаға, Сосновканан килгән врачтарға, Венера апайға, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға, дуҫ-иштәргә, Шығай мәктәбе уҡытыусыларына, Сермәндән килгән туғандарға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Киләсәк көндәрегеҙгә тыныслыҡ, иҫәнлек-һаулыҡ, оҙон ғүмер, ғаилә бәхете теләйбеҙ.

**Мәрхүмдең ҡыҙҙары Ғәзимә һәм Әклимә.**

## ИҪКӘ АЛАЙЫҠ



[771.] Сермәндә йәшәгән беҙҙең ғәзиз улыбыҙ, ҡустыбыҙ, ағайыбыҙ **Илфат Миңнеәвәли улы СӘЛМӘНОВТЫҢ** вафатына 6 июлдә 5 йыл булды. Аяуһыҙ сир ҡәҙерлебеҙҙе был фани донъянан бик иртә алып китте. Уны белгәндәр, хөрмәт иткәндәр беҙҙең менән бергә ошо көндәрҙә ҡәҙерлебеҙҙе бары яҡты хәтирәләр менән иҫкә алһын ине, сөнки беҙҙең яҡыныбыҙ бик кешелекле, изге, нескә күңелле, ярҙамсыл булды. Ҡәҙерлебеҙҙең йәндәре йәннәттә, ауыр тупрағы еңел, ҡараңғы гүрҙәре яҡты булһын.

**Мәрхүмдең әсәһе, ағайҙары, апайҙары һәм һеңлеләре.**




**Директор-баш мөхәррир - С. Ж. МИНҺАЖИТДИНОВА.**

**ОЙОШТОРОУСЫЛАРЫ -** Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы «Урал» гәзите редакцияһы.

**Нәшер итеүсе, мөхәрририәт адресы:** 453500, БР, Белорет ҡалаһы, Косоротов урамы, 8

**Мөхәррир (факс)**..........4-28-39
**Яуаплы секретарь, реклама**........................4-28-15
**Иҡтисад бүлеге**............3-14-91
**Компьютер бүлеге**.........4-26-54
**Хаттар бүлеге**..........................3-14-89
**Бухгалтерия**............................4-28-33

**E-mail:** URAL_bel@mail.ru

Урал

Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында 2014 йылдың 1 апрелендә теркәлде.
Теркәү номеры ПИ № ТУ02-01212
ИНДЕКСЫ: 50621
Гәзит шишәмбе һәм шәмбе көндәрендә башҡортса сыға.
Йыл әйләнәһенә 150 һан баҫыла.

Гәзит редакцияның компьютер үҙәгендә йыйылды һәм БР «Белорет матбуғат йорто» дәүләт унитар предприятиеһында офсет ысулы менән баҫылды.
**Матбуғат йортоноң адресы:** 453500, БР, Белорет ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 55/1.
**Тел: 8(34792) 3-07-97**

У Ошо билдә аҫтында сыҡҡан мәҡәләләр түләүле, реклама хоҡуғында баҫыла. Реклама һәм иғландарҙың йөкмәткеһе өсөн реклама биреүселәр яуаплы.

Мәҡәләләрҙә килтерелгән фактарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы. Авторҙарҙың фекере мөхәрририәттеке менән тап килмәүе лә мөмкин. **Ҡотлауҙар хаҡы** - 250-500 һум.
**Аҡсаны ебәрергә:** г.Белорецк, ОАО «УралСиб», ИНН0211002046, р/с 40702810600370000161, к/с 30101810600000000770, БИК 048073770, ред. газеты «Урал».

**Күләме** - 1 баҫма табаҡ. **Ҡул ҡуйыу ваҡыты:** 16.00. **Ҡул ҡуйылды:** 16.15. **Тираж: 1450**. **Заказ**: 3228. Һатыуҙа хаҡы ирекле. **Дежур: Э. Мөхәмәҙиева.**